**Һуғыш- уйын эш түгел!**

Бирелгән текстарҙың барыһы ла 1812 йылғы Ватан һуғышына арналған әҫәрҙәрҙән алынған. Мин өсөнсө тексты һайлайым. Өҙөк “Француз бәйетенән” алынған.
Бәйет башҡорт халҡының ауыҙ- тел ижадында үҙенсәлекле жанр. Ул тормошта булған ниндәй ҙә булһа аяныслы, фажиғәле хәл- ваҡиғаларҙы һүрәтләүгә ҡоролған шиғри әҫәр. Кешеләргә бындай ваҡиғалар ғибрәт булһын өсөн яҙыла. Шундай хәлдәрҙең сәбәпселәрен әрләй, ҡарғай халыҡ. Беҙ туған әҙәбиәт дәрестәрендә бик күп бәйеттәр уҡығаныбыҙ бар. Улар ҡурҡыныс.Бында һүрәтләнгән һуғыштың сәбәпсеһе- французлар. Автор уларҙы ҡәһәрләй, әрләй. Уларҙы ер талаусылар, ти. Улар- гонаһ ҡылыусы ҡатилдар, йыртҡыстар, мөртәт, мөхриб, тип әйтелә.Был текста ла ҡурҡыныс күренештәр һүрәтләнә. “Кеше менән хайуан ҡаны аралашты,Ер һеңдереп өлгөрә алмай, өҫтән ташты”,- тип яҙыла. Ваҡиғалар бер аҡланда бара. Уның иге- сиге күренмәй. Затлы ирҙәр, малдар ҡырыла. Өҙөктә күтәрелгән проблема- ул һуғыштың бар тереклекте юҡҡа сығара торған ҡот осҡос ваҡиға икәнен күрһәтеү. Хатта ел дә бында үлем еҫен таратып иҫә тип әйтелә. Шулай уҡ ысын ирҙәргә дан йырлана: “Ыласын ирҙәр хас дошмандарҙы онотмаҫтар,

Һепереп түкмәй изге ерҙән вә ҡайтмаҫтар,

Ҡәлғәләрен вата-емерә өңөнә етеп,

Французларҙы пәймәнлеккә[5] сәбәп иттек”. Улар ҡурҡыуҙың ни икәнен дә белмәйҙәр. Әҫәр тарихи, иҫергән , үҙләштерелгән һүҙҙәргә бай. Әҫәрҙә кеше зары, халыҡ зары, заман зары сағыла. Дошманға асыу һәм нәфрәт. Илгә килгән афәт барыһын да йонсотҡан.

Кеше талау, ер талау, ил талау. Ул иң ҡурҡыныс яуызлыҡтарҙың береһелер тип уйлайым мин. Кемгәлер ҡаршы яу башлау- ул ҙур аламалыҡ. Күпме ҡан- йәш ҡойола, ғүмерҙәр ҡыйыла, йорт- ҡуралар емерелә, кешеләр физик һәм психик зәғифлек ала....

Беҙҙең илебеҙ тарихында бик күп яуҙар булған. Халҡыбыҙ ил таларға килгән бер кемгә лә үҙ ерен бирмәгән. Был- Тыуған илгә булған оло һөйөүҙәндер, тип уйлайым мин.

Илдәр тыныс булһын ине. Бер ваҡытта ла, бер ҡайҙа ла һуғыш булмаһын ине. Эй, халыҡтар, илдәр! Дуҫ, татыу булайыҡ, тип ҡысҡыраһым килә минең. Йәшәһен ерҙә халыҡтар дуҫлығы һәм ТЫНЫСЛЫҠ!